Муниципаль мәктәпкәсә белем биреү бюджет учреждениеһы
Бала үҫтереү үҙәге - "Аҡбуҙат" балалар баҡсаһы

Ата-әсәләр өсөн консультация:

# "Уйынсыҡ һайлай белегеҙ"

Аметова Р.М.
педагог - психолог

Сибай

Әлбиттә, уйын – баланың төп эшмәкәрлеге булараҡ, балаларҙың психик процесстары үҫешенә лә тәьҫире сағыштырғыһыҙ ҙур. Ул балаларҙың логик фекерләүен, иғтибарын, хәтерен, телмәрен үҫтереүгә булышлыҡ итә.

Аңлайышлы, мауыҡтырғыс һәм бала үҙе теләп башҡарған уйын балала шатлыҡ, ҡыуаныс, эске азатлыҡ һәм уйындан кинәнес алыу хистәрен уята.

Бала тиҫтерҙәре менән уйнағанда уйынсыҡтары менән бүлешергә, сират еткәнде көтә белергә һәм бергәләп уйнарға өйрәнә.

Уйынсыҡты боҙоп, уны яңынан йыйған ваҡытта, бала ҡыҙыҡһыныуын ҡандыра, уның серен асыу ҡәнәғәтлеген тоя, боҙған уйынсыҡтың төҙөлөшөн өйрәнә.

Уйындар аша балалар ҡыйыуыраҡ булырға һәм үҙҙәрен иркен тоторға өйрәнәләр.

Уйын – бала һәм ололар менән үҙ-ара йылы ыңғай аралашыу өсөн алыштырғыһыҙ алым булып тора.

Балалар уйнағанда төрлө уйынсыҡтар ҡулланып уйнайҙар, ә ниндәй уйынсыҡтарға өҫтөнлөк бирергә һуң?

Иң мөһим шарт - уйынсыҡ СанПин, стандарт талаптарына ярашлы бала өсөн хәүефһеҙ булырға һәм йәш үҙенсәлектәренә тап килергә тейеш.

Ата - әсәләр уйынсыҡ һайлағанда уйынсыҡ яһалған материал баланың йәшенә тап килеүен, һәләтен ҡәнәғәтләндереүен күҙ уңында тоторға тейеш. Бик ябай уйынсыҡтар баланы тиҙ ялҡыта, ҡатмарлыларына ҡарата бала үҙенә ышанысын юғалтыуы ла ихтимал. Шулай уҡ, мускулдарға көс төшөрөрлөк, фантазияны үҫтерерлектәренә өҫтөнлөк биреү мөһим.

Уйынсыҡтар һайлау ҡағиҙәләре:

- материалдың баланың йәшенә тап килеүе;
- еҫ сығармауы;
- көслө тауышлы булмауы;
- формаһы, мөйөштәре түңәрәк булырға тейеш;
- киҫәтеүсе яҙыуҙар (Иғтибар! Һаҡ булығыҙ!);

- ысынбарлыҡ менән бәйләнеш;
- һатып алыу урыны (махсус уйынсыҡ магазиндары);
- уйынсыҡтың төҫө (үтә сағыу йәки ҡара төҫтәрҙә булмауы);
- инструкцияның булыуы;
- йәш арауығы (+3, +6);
- тематикаһы, мәҫәлән, монстрға оҡшаған уйынсыҡтар һайларға ярамай;
- детальдәренең бөтөн, ныҡ һәм ваҡ өлөштәргә тарҡалмай торған булыуы.

Ата - әсәләр өсөн тәҡдим ителгән уйындар:

1. “Кәнфит”. Бала күҙҙәрен йомоп үҙе яратҡан кәнфитте ашай.
2. “Лимон”. Ҡулдарына лимондар һалып, уларҙы сиратлап ҡыҫып тота һәм бушата.
3. “Ялҡау бесәй”. Бала иркен итеп тын ала һәм бесәй кеүек йыбанып ҡына кирелә.
4. “Шофер”. Ҡулдарына руль тотоп машинаны йөрөтә (кәүҙәне төрлө яҡҡа бороп машинаны йөрөтөү отошло).